*Артур ФӘТКУЛЛИН*

# Бөгөнгө драматургияла ауыл темаһы һәм тормош-көнкүреш конфликты

Сөләймән Латиповтың ”Көнләш, Америка, көнләш!”, Рәлиф Кинйәбаевтың ”Айғырыңды үтескә бир!” комедиялары — бөгөнгө тамашасының яратып ҡараған спектаклдәре. Пьесалар нигеҙендә — хәҙерге ауыл мәсьәләләре. Драматургтар крәҫтиән көнкүрешендәге комик хәлдәрҙе күп яҡтыртһа ла, замандың үтә етди проблемаларын да үткер конфликттарҙа күрһәтеүгә ирешкәндәр. Көндәлек тормоштағы мәшәҡәттәр менән бер рәттән, ауылдарҙың аяныс хәлдә ҡалыуы, ташландыҡҡа әйләнә барыуы, билдәһеҙ киләсәге кеүек проблемалар ҡуйыла.

”Перспективаһыҙ ауылдар” тигән термин үткән быуаттың алтмышынсы йылдарында йәмғиәтебеҙҙә йышыраҡ осрай башлай. Дәүләт эшмәкәрҙәре, бәләкәй ауылдарҙың сығымлы булыуына һылтанып, күптәрен күрәләтә юҡҡа сығара. Ҙур ҡасабалар төҙөлә. Әммә икенсе проблема килеп тыуа: йыйылма халыҡтан торған ундай йәшәү пункттарында бысраҡлыҡ күбәйә, эскелек һәм аҙғынлыҡ көсәйә, хеҙмәткә ҡараш бөтөнләй үҙгәрә. Ә былар инде кешене әхлаҡһыҙлыҡҡа илтеүсе күренештәр булып тора. Шулай уҡ йәштәр күпләп ҡалаға ынтыла, сөнки уларҙы сәғәте билдәле эш көнө, матур тормош, ҡала шау-шыуы тарта. Колхоздар көсһөҙләнеп, бөтә барған һайын ауыл ерендә эш тә кәмей. Эш бөткәс, эскелек, аҙғынлыҡ, урлыҡ арта. Йәмғиәттең яҙылмаған, әммә ҡотолғоһоҙ ҡануны был. Драматургтар, ошоларҙы иҫәптә тотоп, комедияларында ауылдың киләсәге нисек булырға тейешлеген үҙҙәренсә күҙаллай, юҡҡа сығыуҙан һаҡлап ҡалыу сараларын эҙләй, йәнтөйәк менән бәйләнеш өҙөлгәс, әхлаҡтың да яйлап юғаласағына ишаралай.

С.Латиповтың әҫәрендә егерме-утыҙ йортҡа ҡалған ауыл яҙмышы үҙәктә тора. Ҡасандыр йөҙҙән ашыу йортло ауыл әлеге көндә һүнеп бөтөп бара. Барса халыҡ, ғәҙәттәгесә, район һәм ауыл советы башлыҡтарын һүгә, сит илдәге тормошто маҡтай, элек ауылдарының алдынғылар рәтендә йөрөүен һағынып хәтергә ала. Ауыл кешеләре, күңел ябайлығы менән айырылып, үҙҙәренә генә хас сифаттарҙа кәүҙәләнделә. Әйтәйек, ауыл карттары Бәҙретдин менән Мәғәфүр әле ҡысҡырған әтәс кемдеке булыуы тураһында һуғышыр сиккә етеп бәхәсләшәләр:

”**Мәғәфүр**. Һин күптән Әхмәттең әтәсе менән Хәлфетдиндекен бутай башланыңмы?

**Бәҙретдин.** Ни эшләп Әхмәттеке? Хәлфетдиндең әтәсе ҡысҡырҙы!.. Малай-шалай саҡтағы ”Үр яҡ менән Түбән яҡ һуғышы”нан башлап миңә ҡаршы сыҡтың. Һаман туҡтамайһың.

**Мәғәфүр.** Һин үҙең бәхәсләшәһең! Хәлфетдиндекенең тауышы ҡалын, белдеңме? (Шул мәл тағы ла әтәс ҡысҡыра). Ана, ә бының тауышы бөтөнләй моңло”.

Был ҡаршылыҡ бер бөгөн генә тыумаған икән: малай саҡтарындағы уйындар барышында, йәш саҡтарында ла ҡыҙҙар өсөн ҡаты ғына бәрелештәр булған. Фатима исемле ҡарсыҡҡа Мәғәфүрҙең үпкәләй биреп өндәшеүендә был асыҡ сағыла: ”Нишләп ул магазинды Бәҙретдиндән һорайһың, минән һора. Йәш сағыңда ла, мине һанға һуҡмай, Бәҙретдингә ҡыҙыҡтың”.

Ауыл халҡының, ғәҙәт буйынса, көтөү ҡаршылаған урында — клуб эргәһендә — донъя хәлдәре тураһында ләстит һатыуҙары, Сәләхетдиндең быҙауы һыйырға ҡушылыуы, Нәфисәнең һыйыры еленләп йөрөүе һәм шуның тураһында көтөүсе Буранбайҙы иҫкәртеүе, Фатиманың ун көн магазин асылмауы өсөн бошоноуы был төбәктә тормош һәүетемсә үҙ ағышы менән барыуын белдерә.

Һил генә барған ауыл тормошон Әхтәм исемле инглиз теле уҡытыусыһы, мәктәп директоры көстәй ҡуҙғытып ебәрә. Тыуған ауылы бөтә барыуына битараф ауылдаштары өсөн йәне әрней егеттең. Ул быға тиклем дә байтаҡ эштәр башҡарған: эшләүҙән туҡтаған мәктәпте кире астырып уҡыта башлай, ауылға электр уты үткәрттерә, гәзиткә яҙғандан һуң магазин да асалар. Ә ауыл башлығы Ғайфулла ауыл өсөн бер ни эшләмәй, байрам итеп, эсеп тик ята. Район үҙәгендә ҙур йорт та төҙөй икән: киләһе йыл шунда күсергә иҫәбе.

Шахмат оҫтаһы Фәрғәт исемле уҡыусы малай менән Мәғәфүр шахмат уйнап ултырғанда улар янына осраҡлы ғына ауылдаштары йыйылып китә. Бәҙретдиндең тәҡдиме буйынса, ҡалған кешеләрҙе саҡырып, йыйылыш үткәрергә булалар. Көнүҙәктә — ауыл башлығын яңынан һайлап ҡуйыу. Әммә йыйылыш көткән һөҙөмтәне бирмәй. Әле вазифаһынан баш тартырға йыйынмаған Ғайфулла ауылдаштарының ауыҙын үҙенең ҡасандыр эшләгән ”изгелектәре” хаҡында таҫма телләнеп томалай. Береһененең улдарына кәрәкле документтар биреп торған, кемеһенә ер һалымын кәметергә булышҡан, ҡайһыһының ҡалалағы ҡыҙҙарына справка эшләп биргән. Ҡыҫҡаһы — торғаны менән бер суфый кеше булып күренергә тырыша. Әммә былар ауыл советы рәйесенең оло ҡаҙаныштары түгел, ә иң тура вазифаһы икәнен Әхтәм әйткәс, йыйылышты яптырыу яғын ҡарай.

Бөтәһе лә Ғайфулланың ғына ауыҙына ҡарап тора һәм күбеһе ситтән кемдер килеп ярҙам ҡулы һуҙырын көтә. Был иһә совет осоро идеологияһының кешеләр аңына ныҡлы инеп ултырыуына асыҡ бер миҫал. Сөнки социализм ҡоролошо дәүерендә кешеләргә уйларға бик ирек бирелмәй, ә ҡушылғанды, әҙер әмерҙе генә үтәргә өйрәтелгән була.

Әлбиттә, бындай етәкселек алымы кешеләрҙә вайымһыҙлыҡтың сәскә атыуына килтерә. Ҡырағай капитализмдың ҡанундары бик ҡаты: көслөнөкө донъя, ә көсһөҙҙәр заман тәгәрмәсе аҫтында ҡаласаҡ. Вайымһыҙҙарҙың да кәмәһе оҙаҡламай ҡомға килеп төртөләсәген һаман аңлап етмәй шул уҡытыусы егеттең ауылдаштары.

Ауылдаштарын ауыр хәлдән ҡотҡарыуға Әхтәмдең хәйләкәр эше булышлыҡ итә. Йыйылыштан һуң Бәҙретдин Әхтәм менән һөйләшеп ултырғанда радионан американылар тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәт ишетеүен әйтә. Голливудта кино төшөрөү өсөн йөҙ миллион доллар аҡса туҙҙырылған, шул аҡсаның сиреген генә беҙгә бирһәләр, ауылды тотошлай аяҡҡа баҫтырыр инек, ти ҡарт. Ошо ваҡыт Әхтәмдең башына бик мут фекер килә һәм ул үҙ планын тормошҡа ашырырға тотона.

Американылар килә тигән хәбәр ауылды көстәй ҡуҙғытып ебәрә. Ә уларҙың ябай сәйәхәткә түгел, ә йорт-ерҙәрен һатып алырға килеүе тураһындағы хәбәр халыҡты аптырашта ҡалдыра. Маҡсаттары — ауыл эсендә кино төшөрөү, ә кешеләргә йылға аръяғында, ере бик яҡшынан булмаған урынға, коттедждарҙан өр-яңы төйәк төҙөйәсәктәр икән. Бындай хәбәр һәммәһен дә һиҫкәндереп ебәрә: кемдер бөтә уңайлыҡтары булған өйҙә йәшәйәсәге хаҡында хәҙерҙән үк хыяллана башлай, бәғзеләре атай-олатайҙары төйәк иткән ауылды юҡ итеүҙәрен баштарына һыйҙыра алмай.

Емерелеп барған клубҡа йыйылған халыҡ был юлы тыуған төйәктәре киләсәгенә битараф ҡалмай. Айырыуса көтөүсе Буранбай ныҡ сығынсылай, хатта сходкаға тиклем үҙе тәүге йыйылышта яҡлаған Ғайфулланы ауылды һатырға тырышып йөрөгәне өсөн түпәләп ташлай. Ауылдаштарға айырыуса продюсер Мартин Донгтың һүҙҙәре көслө тәьҫир яһай: ”Мине дөрөҫ аңлағыҙ, яңы ауылды төҙөү — беҙҙең өсөн сүп кенә... Ә бына тап һеҙҙәге кеүек туҙып бөткән, иҫкергән ауыл унлата ҡыйбат буласаҡ. Ни өсөн? Сөнки Америкала иҫке, туҙған, кәрәкмәгән ярыҡ-йороҡ ташландыҡ материалдар табыу үтә ауыр, дөрөҫөн әйткәндә — мөмкин түгел. Әле, килер алдынан, бер өйөгөҙҙө ҡарап торҙом. Ул бит үҙе бер сәнғәт өлгөһө — әйтәйек, ул ҡырҡ урындан ямалған, аҫтан таштар менән терәтелгән. Иҙәнгә ҡайын таҡтаһы ҡағылған. Ә ишек үҙе бер мөғжизә: ҡасандыр уның күгәндәре булған, хәҙер машина тәгәрмәсенең резина киҫәге ҡуйылған...” — ти ул, ауылды һатып алыуҙың сәбәптәрен аңлатып.

Иң беренселәрҙән булып ҡыҙыу холоҡло Буранбай үҙ һүҙен әйтә. Ер ярығы булһа, инеп китер инем, ти егет. Америка негры ауылдаштарының ялҡаулығын, ғәмһеҙлеген, күңелдәренең улаҡлығын асып бирҙе бит. Ниндәй ғәрлек! Күп нәмәләргә күҙҙәрен асҡан өсөн Буранбай американыға хатта рәхмәт әйтә. Уның һуңғы һүҙҙәре фәһемле: ”Ошоға ҡәҙәр мин кемдәндер, айырыуса үҙебеҙҙең йүнһеҙ хөкүмәттән нимәлер көтөп ятҡанмын. Алма беш, ауыҙға төш, тип. Баҡһаң, хөкүмәт миңә төкөрөп биргән. Ни өсөн? Сөнки мин үҙ-үҙемә төкөргәнмен. Урман тулы ағас, ә мин — таҡтаһыҙ. Ауылдаштар, һеҙ теләһә ни

эшләгеҙ, ә мин урынымдан ҡуҙғалмаясаҡмын. Ул ғына түгел, иртәгә яңы өйөмә нигеҙ ҡора башлаясаҡмын", — ти ҙә сығып китә. Район хакимиәте башлығы урынбаҫары Имай Насыровичтың халыҡты күсергә өгөтләүе лә утҡа кәрәсин һипкәндәй була. Ҡыҙыу бәхәс, тартҡылаш башлана. Ғайфулла, халыҡтың күсергә ризалығын тиҙерәк алырға тырышып, өтөп алып бара. Күптәр хатта күнгәндәй ҙә була. Ошо мәл Санияның ир-ат ғорурлығына тейеүе, "Салбар кейеп йөрөгән булаһығыҙ, ҡайҙа һеҙҙең ирлегегеҙ?" — тиеүе ваҡиғаларҙы тағы ла ҡатмарлаштырып ебәрә. Ә Бәҙретдиндең һүҙҙәре барыһын да ымһындырғыс тәҡдимдән баш тартырға мәжбүр итә. Әйҙәгеҙ, һатайыҡ, ти ул, тәүҙә ауылды, унан районды, шунан ата-бабаларыбыҙ ҡан ҡойоп һаҡлаған Ватаныбыҙҙы... шунан үҙебеҙҙе һатырбыҙ — ҡоллоҡҡа. Ауылдаштары сит ил кешеһенә тыуған төйәген һатырға ултырғанда нисек түҙһен инде ир уҙаманы? Ул: "Ғүмер буйы беҙҙең ер тыныслыҡ иле булған. Шуға ла башҡа халыҡ беҙгә һыйынған. Хәҙер ошо илдә һуғыш асып ебәрегеҙ. Мин риза. Сания әйтмешләй, тыуған нигеҙебеҙҙе ташлап китәйек — быуындар бәйләнеше өҙөлһөн. Зыяратта ятҡан ата-бабаларҙың рәнйеүенән ҡурҡмайыҡ. Ҡәһәрләһендәр — төкөрөп бирәйек. Ауыр заман килде, тип бөгөлөп төшәйек. Әйҙәгеҙ, күтәрегеҙ ҡулдарығыҙҙы. Риза булайыҡ", — тигәндән һуң ауыр тынлыҡ урынлаша. Бынан һуң береһенең дә күсергә теләге булмай таралышалар.

Әхтәм бәләкәй саҡтан уҡ шуҡ була һәм ауылдаштарына йыш ҡына төрлө сюрприздар эшләй. Мәҫәлән, ауылға артистар килә, тип клубҡа иғлан яҙып элеп ҡуя. Ихласлап йыйылған халыҡ аҙаҡтан ғына беренсе апрель булыуын иҫенә төшөрә. Тау башына ел тирмәне ярҙамында эшләгән электр маяғы ҡуйыуы тураһында хатта үҙәк газетала яҙып сығалар. Әле лә ауылдаштарын шаяртҡан икән Әхтәм. Тик ҡыҙыҡ өсөн генә түгел, ә уларҙы һынап ҡарау, тәүбәгә килтереү өсөн. Сөнки килгән американылар үҙенең артист дуҫы Рәил, ә ярҙамсыһы һәм тәржемәсеһе уның менән театрҙа бергә эшләүсе Зилә менән Ләйсән булып сыға.

Имай Насыровичтың Америкаға сығып китеү ниәте менән тәржемәсе ҡыҙ Джинаға (Ләйсән) өйләнергә теләген белдереүе ҡыҙыҡлы ла, ҡыҙғаныс та итеп һүрәтләнә. Ғайфулла иһә һаман да, ситуациянан файҙаланып, үҙ мәнфәғәтен ҡайырыуы, етәкселәр алдында ҡойроҡ болғауы арҡаһында үтә көлкөлө хәлдәргә ҡала. Драматург йәмғиәттә булған кәмселектәрҙе, кешеләге шәхси етешһеҙлектәрҙе ошо образдарҙа сағылдырып, ҡаты сатира утына тота. Ауыл кешеләрен һынландырыуҙа юмористик алымдар ҙа юҡ түгел. Игеҙәк Нәфисә менән Фатима ҡарсыҡтарҙың әрепләшеүе, сибәр Санияның ирҙәр моронона сиртеүе кеүек эпизодтар ихлас булыуы менән тамашасы күңелендә кинәнеп көлөү, матур тойғолар уята.

Йомғаҡлап әйткәндә, "Көнләш, Америка, көнләш!" комедияһы, "тапалған" теманы ҡуҙғатһа ла, көнкүрештәге мөһим мәсьәләләрҙе күтәреүе менән ҡыҙыҡлы. Пьесалағы конфликттар бер киҫкенләшеп, бер йомшарып, көлкө аралаш етдиләнеп китә. Кешеләрҙең күңел ябайлығы менән ялғанлыҡ, Ватан һәм байлыҡ, әҙәп һәм әхлаҡһыҙлыҡ кеүек

төшөнсәләр бәрелешә. Сиселештә мөртәттәрҙең яза алыуы, ауылдың яңынан тергеҙелә башлауы пьесаны оптимистик яңғырашлы итә.

Рәлиф Кинйәбаевтың ”Айғырыңды үтескә бир!” пьесаһында конфликт башлыса ике ут күрше араһында килеп сыға. Нисәмә йыл бергә йәшәп тә бындай хәлгә ҡалғандары булмай уларҙың. Нәҫелдәренә ”Ташбаш” ҡушаматы йәбешкән Хәмиҙуллала — ауылдағы берҙәнбер айғыр. Әле ул йәй буйы бейәләр менән йөрөп, ябығып бөткән һәм шуға ла хужаһы уны сығармай һарайға бикләп ҡуйған. Иҫәбе — көҙгә тиклем һимертеп һуйырға. Быны ишеткән күршеһе ”Күҫәк” Сынтимер дүрт бейәһенең ҡыҫыр ҡалыуынан ҡурҡа, сөнки колхоз бөткәс, ҡарап торғандары шул мал-тыуар. Хәмиҙулланы өгөтләп тә күндерә алмағас, Сынтимер уға хатта аттарҙы алмашырға тәҡдим яһай. Тормош көйһөҙләнеүенә асыуы килгән Хәмиҙулланың тиҫкәреһе сыға — ул айғырын күрше бейәләренә ҡушыуға теше-тырнағы менән ҡаршы тора. Ошо арҡала, һүҙ артынан һүҙ сығып, ике күрше араһында яман талаш ҡуба, хатта, алтмышты уҙыуҙарына ҡарамай, көрмәкләшеп тә алалар. Күршеһе айғырын ике көнгә генә бейәләренә ҡушып ебәреүҙән баш тартҡас, Сынтимер ҙә уларға ҡоҙоғонан һыу алыуҙы тыя. Бына ошо сәбәпле ғүмерҙә һүҙгә килешмәгән ут күршеләр, үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, киҫкен генә булған конфликтҡа керәләр. Ә сәбәбе иһә төптәрәк ятҡан булып сыға, хатта конфликт күпмелер кимәлдә социаль яңғыраш ала. Сөнки колхоз булған осорҙа берәү ҙә бейәгә айғыр, һыйырға үгеҙ эҙләп йөрөмәй. Ҡоҙоҡтағы тәбиғәт биргән һыуға талашыу аҡылдарына ла килмәй күршеләрҙең, сөнки быға уларҙың ваҡыттары ла булмай. Ә хужалыҡ тарҡалғас, ҡайҙа барып һуғылырға белмәгән миллиондарса крәҫтиәндәр кеүек, Сынтимер менән Хәмиҙулланың эштәре мөшкөлләнә. Бар ғәләмде аптыратып, юҡ сәбәпте бар итеп, дошманлашып ҡуялар.

Колхоз бөткәс, күршеләргә иҫке булһа ла комбайн эләгә: әле ул ишек алдарында ултыра. Колхозсыларҙың ерен ”помещик” Лотфрахман тигән кеше арендаға ала һәм хаҡты түләгәндә уңыштың ундан бер өлөшөн вәғәҙә итә. Әммә эшҡыуар, игенселек үҙен аҡламауға һылтанып, бөтә ергә лә тәмәке сәсә. Үҙҙәрен төп башына ултыртыуҙарын аңлаған колхозсылар ҡаты асыуланалар, әммә эш үткән: ер ваҡытлыса булһа ла Лотфрахмандыҡы. Нишләһендәр, баш эйеп помещикка эшкә ялланалар һәм уның тәмәкеһен йыйырға эшкә төшәләр. Өҫтәүенә, ”Бүре” Хәйрүш күршеләренең бесәнлектәрен урлап сабырға тырыша. Тәү мәл, әле низағ сыҡҡанға тиклем, ғаиләләре менән күмәкләшеп барып ҡыуып-туҡмап ҡайтаралар ҙа ул уғрыларҙы. Яланлыҡтарын бергәләшеп алмаш-тилмәш ҡарауылларға һүҙ ҡуйышҡан күршеләр, конфликт көсәйгәс, был турала онотalар һәм һөҙөмтәлә ҡышҡылыҡҡа бесәнһеҙ тороп ҡалалар: талаш сыҡҡас, икеһенең дә бесәнлеген сабып алып китә Хәйрүштәр. Халыҡ мәҡәлендәгесә, ”айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар” кеүек килеп сыға.

Әҫәрҙә мөхәббәт проблемаһы ла ныҡ ҡына ҡуйыртыла. Хәмиҙулланың улы Илшат Сынтимерҙең ҡыҙы Рәшиҙәгә мөкиббән киткән.

Лирик күңелле егет тыуған төйәген бик ярата, ғүмерен дә крәҫтиән хеҙмәте менән бәйләргә ынтыла. Ә Рәшиҙә иһә ҡалаға ысҡыныу яғын ҡайыра. Шуға ла ул егеттең ауылдағы киләсәк тормошо тураһындағы хыялына мыҫҡыллап ҡарай, матур тормош ҡороу тураһындағы теләктәрен, уйҙарын кәмһетә. Ҡыҙ фекеренсә, ҡала урамдары буйлап асфальт юлдарҙан матур кейенеп, шпилькалы туфлиларҙа йөрөүгә ни етә?

Икенсе ғашиҡтар — Сынтимерҙең ҡырҡ йәшлек улы Хөснулла һәм Хәмиҙулланың ултырып ҡалған ҡыҙы Фәйруза. Эштән башҡаны белмәүсе буйҙаҡ ир үҙенә Фәйрузаны яңы асҡан кеүек була. Улар араһындағы мөнәсәбәт айырыуса ҡыҙыҡ итеп кәүҙәләндерелә.

”**Хөснулла.** Күпме ваҡытым бушҡа үткән. Ниндәй иҫәр булғанмын! Әгәр ҡатын-ҡыҙ ҡосағының ниндәй татлы икәнен белһәм, әллә ҡасан өйләнгән булыр инем.

**Фәйруза.** Кемгә өйләнер инең? Әйт әле — кемгә? Тиҙ генә!

**Хөснулла.** Һиңә, тик һиңә.

**Фәйруза.** Бына шулай тиген. Мин һине күпме саҡырҙым, иҫлә әле, ә һин һәр саҡ ҡолағыңа ла элмәнең. Эшкинмәгән тәк эшкинмәгән”.

Күршеләр араһындағы низағ та был ике ғашиҡ арҡаһында ыңғай сиселеш ала. Өйләнешергә һүҙ ҡуйышҡандан һуң улар тәүҙә айғырҙы яланға сығарып ебәрә, аҙаҡтан ҡоҙоҡтағы йоҙаҡты алып ырғыта. Айғыр юғалыуына енләнгән Хәмиҙулла ла балаларының был ҡарарына ҡаршы килә алмай, һыуына, атын да күршеһенә ”үтескә” биреп торорға ризалаша.

Драматург пьесаһын оптимистик рәүештә тамамлай: Рәшиҙә, Илшатты ҡыуандырып, ҡаланы ерһенмәй ҡайтып төшә. Лотфрахмандың тәмәке баҫыуын борсаҡ ямғыры һуғып китә, өйө һәм хужалығы йәшен һуғыуҙан янып бөтә, ә иң мөһиме — күршеләр яңынан дуҫлаша һәм ҡоҙалашып та ҡуя. Күмәкләгән яу ҡайтарған, ти халыҡ. Күршеләр ҙә хужалыҡтарын берләштереп, үҙҙәренең колхозын төҙөргә ҡарар ҡыла. Татыу йәшәүгә ни етә, тигән мәғәнә үткәреү менән бер рәттән, автор тамашасы иғтибарын йәмғиәттә инде әллә ҡасан өлгөрөп еткән мәсьәләгә йүнәлтергә тырыша. Совет осоронда төҙөлгән колхоз-совхоздар үҙ мөмкинлектәрен әллә ҡасан сарыфлап бөткән. Әйтергә кәрәк, заманында улар ауыл тормошонда мөһим роль уйнаны, хәл иткес ваҡыттарҙа ҙур файҙа килтерҙе, ил иҡтисадын алға ебәреүгә өлөш индерҙе. Быны инҡар итеп булмай. Һуңғы йылдарҙа өлкән быуын колхоз-совхоздарҙы һағынып иҫкә алһа ла, был хужалыҡ төҙөлөшө хәҙерге ауыл өсөн яраҡһыҙ. Крәҫтиән хужалығын, үткән тәжрибәгә таянып, үҙгәртеп ҡорорға ваҡыт етте, әммә ул дәүләт тарафынан яҙмыш ҡосағына ташланырға тейеш түгел. Иҡтисады алға киткән илдәрҙә лә ауыл хужалығы ярҙамға мохтаж. Беҙҙә иһә киреһенсә — кешеләрҙе туйындырыусы хужалыҡ тармағы ташландыҡ хәлдә. Бына ошо нескә фәлсәфәне тотоп алған да инде драматург. Ауылдың бөгөнгө торошон ябай, көлкөлө һәм сағыу биҙәктәр аша һүрәтләп, көнкүрештәге ғәҙәти ҡаршылыҡтарҙы оҫта кәүҙәләндергән.